


- *Ә хәзер әйдәгез дәрескә йомгак ясыйк.*

**IV. Йомгак ясау.**

**V. Өй эше.** *"Матурлык дөньяны коткарыр" дигән темага инша язып килергә.*



## *Кәримова Әлфиә Рамил ҡыҙы*

*2003 йылда Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетын ҡыҙыл дипломға тамамлай. 48-се башҡорт лицейының юғары категориялы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы. Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы, "Педагог – тикшеренеүсе – 2008", "Башҡортостандың баш ҡалаһы башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы – 2009" конкурсы еңеүсеһе, Эш стажы – 6 йыл.*

*Кәримова Әлфиә Рамил ҡыҙы "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә уҡыусыларҙың ижади фекерләүен үҫтереү" методик темаһы өҫтөндә эшләй.Әлфиә Рамил ҡыҙы уҡыу процесында шәхси йүнәлтелгән ҡараш булдырып һәр дәресен уҡыусыларҙың мөмкинселектәренә һәм талаптарына яраҡлаштыра.Уҡытыусының юғары методик оҫталығы башҡорт теле һәм әҙәбиәтенә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыуҙа төп күрһәткес. Балаларҙың ижади фекерләүен, грамотлылығын үҫтереүгә йүнәлтелгән алымдар, төрлө ҡатмарлыҡтағы күнегеүҙәр ҡулланыу Әлфиә Рамил ҡыҙы өсөн ғәҙәти күренеш. Башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыуҙың бай йөкмәткеһе һәм формалары уҡыусыларҙа юғары сифатлы теоретик белем, практик күнекмә формалаштырыуға, үҙ тамырҙарын, тарихын, телен ихтирам иткән гражданин тәрбиәләүгә йүнәлтелгән.*

**Тема***:* ***Мостай Кәрим. "Ҡара һыуҙар" поэмаһына тулы анализ.***

**Маҡсат***: М. Кәримдең тормош һәм ижад юлы тураһында белемдәрен нығытыу, камиллаштырыу. "Ҡара һыуҙар" поэмаһының үҙләштерелеүен тикшереү. Лиро-эпик әҫәргә тулы анализ биреү күнекмәләрен үҫтереү. Патриотик тәрбиә биреү.*

**Йыһазландырыу:** *М. Кәримдең портреты, китаптар күргәҙмәһе, проектор, экран, компьютер, юл саты төшөрөлгән картина, магнитофон, М. Кәрим һүҙҙәренә ижад ителгән йырҙың көйө.*

## Дәрес барышы

**I. Ойоштороу.**

*- Хәйерле иртә, уҡыусылар!*

*- Һаумыһығыҙ.*

**II. Өйгә эште тикшереү.** - *Һеҙгә өйгә эшкә М. Кәримдең "Ҡара һыуҙар" поэмаһын уҡып килергә ҡушылған ине. Бөгөн беҙ әҫәргә тулы анализ яһаясаҡбыҙ. Анализға күсерҙән алда, ижад емешенең авторы хаҡында белемебеҙҙе нығытайыҡ һәм поэманың йөкмәткеһен иҫкә төшөрөп үтәйек. Таҡтаға авторҙың портреты элена.*

*- Кем ул – М. Кәрим?*

*- Ҡайҙа, ҡасан тыуған?*

*- Ниндәй өлкәлә ижад иткән?*

*- Ниндәй темаларға мөрәжәғәт иткән?*

*- Ниндәй наградаларға лайыҡ булған һәм ни өсөн?*

*- Ниндәй әҫәрҙәре менән танышһығыҙ?*

*Һеҙҙең иғтибарығыҙға Башҡорт халыҡ шағирының китаптар күргәҙмәһе тәҡдим ителә. Дәрес тамамланғас, яҡындан танышырһығыҙ.*

*- "Ҡара һыуҙар" поэмаһында нимә тураһында һүҙ бара?*

*(Бер уҡыусы һөйләп бирә).*

**III. Яңы теманы аңлатыу.**

*- Афарин, балалар, автор һәм уның ижадын яҡшы беләһегеҙ икән.*

*Әлеге дәресебеҙҙә беҙ шағир, яҙыусы, драматургтың ижадын өйрәнеүҙе дауам итәбеҙ. Тик бөгөнгө дәрес ғәҙәти булмаясаҡ, мин уны дәрес-уйланыу ҙа, дәрес-хәтер ҙә тип атар инем. Дәрес-уйланыу, сөнки беҙ бөгөн М. Кәримдең "Ҡара һыуҙар" поэмаһына анализ биреү аша әҫәрҙә һүрәтләнгән хәл-ваҡиғалар, ижад емешендә күтәрелгән фәлсәфәүи проблемалар, уның идея-тематик йөкмәткеһе хаҡында уйланырбыҙ, әңгәмә ҡорорбоҙ.*

*Поэманың авторы, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙең арала юҡ. Билдәле булыуынса, ижад емешендә һуғыш хаҡында һүҙ бара. Ә һуғыш ҡорбанһыҙ булмай. Ерем, илем тип янған Бөйөк Ватан һуғышы ветераны менән яу ҡырында ҡулға-ҡул тотоношоп, бер-береһенә терәк, таяныс булып, ауыр ҡанҡойош юлын үткән, илгә тыныслыҡ яулаған атай-олатайҙар был ғәрәсәттә күпләп гүр эйәһе була, тере ҡайтҡандары йылдан-йыл кәмей бара. Уларҙың ҡаһарманлығын, батырлығын, илебеҙ өсөн башҡарған эштәрен, изгелектәрен беҙ бер ҡасан да онотторға тейеш түгел һәм онотмаҫбыҙ.*

*Шулай итеп, юғарыла әйтелгәндәрҙән сығып, бөгөнгө дәрестең темаһын нисек билдәләр инегеҙ? (Мостай Кәрим. "Ҡара һыуҙар" поэмаһына тулы анализ).*

*- Ә хәҙер иғтибарығыҙҙы дәрестең эпиграфына йүнәлтеүегеҙҙе һорайым.*

> ***Илен, халҡын нык аяған –***
> ***батыр булыр,***
> ***Хастан өркөп, йән аяған –***
> ***бахыр булыр.***
>
> ***Мәхмүт Һибәт***



*- Ошо юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ?*

*- Кем ул батыр?*

*- Кем ул бахыр?*

*(Уҡыусылар яуабы)*

*- Тимәк, батыр – ил тип яныр, көйөр, кәрәк икән, ғәзиз ғүмерен бирер, ҡурҡаҡ – үҙ мәнфәғәттәрен генә ҡайғыртыр.*

*- Ниндәй батырҙарҙы беләһегеҙ? (Урал батыр, Салауат батыр, Ҡараһаҡал батыр, Алдар батыр, Батырша һ.б.)*

*Ҡурҡаҡтарҙы тарих хәтерләмәй, телгә алмай, күпмелер ваҡыт яман исемдәре ил буйлап йөрөй ҙә, онотола, ә батырҙар бер ҡасан да кешелек хәтеренән сыҡмай. Был ике ҡапма-ҡаршы төшөнсәләргә дәрес барышында тағы ла кире әйләнеп ҡайтырбыҙ.*

*- Ә хәҙер дәфтәрҙәрҙе асып, бөгөнгө датаны, теманы һәм эпиграфты яҙып ҡуйығыҙ.*

*Уҡыусылар алдында әҙәби әҫәргә анализ яһау өсөн төҙөлгән таблицалар ята. Ошо таблицаға таянып эш алып барыла. Был таблицалағы ҡайһы бер пункт әҫәрҙең жанрына, төрөнә ҡарап төшөп ҡалыуы ла ихтимал, бынан тыш анализ элементтарын дәрестә һәм өйҙә башҡарырға мөмкин.*

*- Уҡыусылар, нимә ул әҙәби әҫәргә анализ яһау, ни өсөн ул кәрәк?*

*(Һәр әҫәр художестволы бер бөтөндө тәшкил итә. Художестволы әҫәрҙе анализлау иһә ошо бер бөтөндө хасил иткән компоненттарҙы айырым-айырым өлөштәргә тарҡатып тикшереүҙе аңлата. Анализ – идея-тематик йөкмәткене асырға ҙур ярҙам күрһәтә).*

*- Балалар! Һәр берегеҙҙең алдында анализ элементтары теркәлгән таблица ята. Ошо таблица бөгөн һеҙгә терәк-таблица ролен башҡарыр. Бынан тыш дәрес барышында һеҙ уны тултыра барырға тейеш булаһығыҙ.*

*- Хәйерле сәғәттә эште әҫәрҙең жанры һәм төрө хаҡында әңгәмәнән башлайыҡ. Был төрҙөң үҙенсәлеген билдәләп китәйек. (Лиро – эпик төр). - Поэманың темаһын нисек билдәләр инегеҙ? (Бөйөк Ватан һуғышы).*

*- Автор әҫәрендә ниндәй проблемалар күтәрә? ( Һуғыш һәм тыныслыҡ, ҡурҡаҡлыҡ һәм батырлыҡ кеүек социаль–философик проблемалар).*

*- Поэманың исеменә иғтибар итегеҙ. Ҡара һүҙе нимә менән ассоциациялана? (ҡайғы, хәсрәт, яманлыҡ, яуызлыҡ)*

*- Ҡара һыуҙар һүҙбәйләнешен нисек аңлатыр инегеҙ? (Һыуҙы ваҡыт менән сағыштырырға мөмкин. Ваҡыт яраларҙы (күңел, тән) дауалай. Уны иң яҡшы табиб, тиҙәр. Һыу ҙа, таҙамы, бысраҡмы, бер урында ғына тормай, туҡтамай аға. Шулай уҡ уны, әгәр түгелһә, ҡоротоп алырға мөмкин. Әҫәрҙең исемендәге ҡара һүҙе яманлыҡҡа, ҡайғы-хәсрәткә ишара яһаһа, һыу һүҙе ниндәйҙер изгелеккә, хәл-ваҡиғаларҙың ыңғай тамамланыуына өмөт уята.*

*- Әҫәрҙең композицияһы хаҡында нимә әйтә алаһығыҙ. (Әҫәр әйләнмә композицияға ҡоролған.*

*Поэма ямғырлы көҙгө төндө һүрәтләү менән асыла. Ҡарамаҡҡа традицион һымаҡ картина төп ваҡиғаға, тол ҡатындың ҡайғыһына, ишара бер параллель.*

*Көҙ миҙгеле, төн үҙе уҡ күңелгә шом һала. Ғәҙәттә көҙ йә ғүмер ахыры, йә ҡайғы-хәсрәт менән ассоциациялана. Артабан шағир ишеген шаҡып, ямғыр шауы менән ҡара шәл ябынған, суҡтарынан һыу ағып*

*торған, өмөт ҡатыш ғазаплы ҡарашлы, үтә сибәр ҡатындың өйгә килеп инеүен бәйән итә.*

*Һуңынан һүҙ төп хәл-ваҡиға хаҡында бара. Поэма аҙағында автор үҙен Сыҙамлыҡ тип атаған геройына кире әйләнеп ҡайта. Уның елкәһенән күп йылдар буйы ауыр йөк булып йөрөгән ҡайғы шәленең һыпырылып иҙәнгә төшөүе менән әҫәр тамамлана.*

*- Образдар системаһы. Беренсе пландағы – Яҡуп*

*Икенсе пландағы – ҡатын, беренсе заттан һөйләүсе һалдат-ветеран.*

*- Ҡемдең ҡайҙа китәһен юл саты күрһәтә тиҙәр.*

*Йыш ҡына халыҡ ижадында уңға барһаң - уңырһың, һулға барһаң – туңырһың, тигән юлдарҙы осратырға тура килә. (Таҡтаға юл саты төшөрөлгән картина элenә. Уңға киткән юлға - "уңға барһаң – уңырһың", һулға боролғанына – "һулға барһаң – туңырһың" тип яҙылған).*

*Был юл саты менән геройҙар араһында бәйләнеш бармы?*

*(Ике һалдатты яҙмыш ошо юл сатына килтерә. Ул – тыуған илдең яҙмышы хәл ителерҙәй һуғыштар менән бәйле юл саты. Дошманды юлын бүлер өсөн бында йә алышып еңергә, йә ергә һеңергә тейешһең. Өсөнсө юл юҡ). Ошо юл сатында торған геройҙар хаҡында нимә әйтер инегеҙ? Уларҙың ҡайһыһы батыр, ҡайһыһы бахыр? Ни өсөн?*

*(Геройҙарға ҡылыҡһырлама. (Дәреслектән табып уҡытыу).*

*- Батыр һәм ҡурҡаҡ образы йәнәшендә бер-ике ауыҙ һүҙ менән бирелгән ҡатын образы хаҡында нимә әйтә алаһығыҙ.*

**Индивидуаль эш.** *Сыҙамлыҡ исеменә киләсәктә тормош юлын дауам итергә ярҙам итерҙәй теләктәрҙән һәм тынысландырыуҙан торған хат яҙҙырыу. М. Кәрим һүҙҙәренә ижад ителгән йырҙың көйө ҡуйыла.*

*- Поэмалағы өҫтәмә образдар. (Һандуғас, арыш бешә, сәскәнән-сәскәгә ҡунып иңкеш бал йыя, ҡайын хуш еҫ бөркөй). Контраслыҡ алымы аша автор һуғыштың мәғәнәһеҙлегенә баҫым яһай.*

*- Художестволы әҫәрҙең үҙенсәлеге нимәлә? (матур әҙәбиәт стилендә яҙыла, һүрәтләү саралары ҡулланыла һ.б.)*

**Төркөмдәр менән эш.**

*Поэма күңелдәргә тәрән үтеп инһен өсөн, М. Кәрим ниндәй һүрәтләү сараларына, мәргән һүҙҙәргә мөрәжәғәт итә икән?*

*1-се төркөм текстан сағыштырыу, метафора таба.*

*2-се – антитезалар, йәнләндереү.*

*3-сө - мәргән һүҙҙәр, афоризмдар.*

*Шарт: һәр уҡыусы эшкә йәлеп ителергә тейеш, шуға күрә тексты бүлеп бирергә мотлаҡ.*

*- Шиғыр төҙөлөшө буйынса анализ.*

**(Парлап эшләү. Һорауҙар 4 вариантҡа бүлеп тәҡдим ителә. Текст бүленеп бирелә).**

*1. Строфаларҙа юлдар һаны? 2. Быуындар һаны.*

*3. Ижектәр һаны. 4. Ниндәй рифма ҡулланылған?*

*- Поэманың идеяһы? (Тыуған ил һәр кеше өсөн иң яҡын, иң ғәзиз, иң ҡиммәт төшөнсә булырға тейеш. Уны һаҡлау, яҡлау – һәр кемдең изге бурысы. Ил ҡурҡыныс алдында торғанда барыһы ла ҡулға ҡорал алып, изге яуға күтәрелергә бурыслы. Илеңә хыянат итеү – ғәфү ителмәҫлек хата. Ундай кешеләргә тереләр араһында ла, үлеләр араһында ла урын юҡ).*



**IV. Нығытыу.**

*Ҡыҙыл йондоҙ биш өлөшкә бүленә. Был өлөштәргә үтелгән тема буйынса йомғаҡлау өсөн һорауҙар яҙыла һәм төркөмдәргә таратып бирелә:*

*1. Әҫәрҙең идеяһы.*

*2. Әҫәрҙең композицияһы.*

*3. Ниндәй һүрәтләү саралары ҡулланылған*

*4. Образдар системаһы.*

*5. Бөгөнгө дәрестән ниндәй фәһем алдығыҙ? (Тыуған илде һөйөргә, яратырға кәрәк. Уға хыянат итергә ярамай).*

*Уҡыусылар һорауҙарға яуап бирәләр һәм таҡтаға магнит менән йондоҙҙоң өлөштәрен йәбештерәләр. Һөҙөмтәлә таҡтала ҡыҙыл йондоҙ ғибәрәт була. Был йондоҙҙоң аҫтына, таҡта аҫтындағы тумбаға шәм ултыртылған).*

*Эпиграфҡа кире әйләнеп ҡайтыу.*

***Илен, халҡын ныҡ аяған –***
***батыр булыр,***
***Хастан өркөп, йән аяған –***
***бахыр булыр.***

**Мәхмүт Һибәт**

*Шулай итеп, уҡыусылар, ил хаҡында һүҙ барғанда "бахыр" тигән яманатың сыҡмаһын, "батыр" тигән даның таралһын.*

*Уҡыусылар, бөгөнгө көндә беҙҙең арабыҙҙа йәшәгән, шулай уҡ әлеге мәлдә тереләр араһында булмаған "батыр" тигән дандары бар тарафтарға таралған шәхестәребеҙҙе бер минут тынлыҡ менән хәтергә алыуығыҙҙы һорайым. (Шәм тоҡандырыла)*

*Батырҙарыбыҙ алдында беҙ мәңгелек бурыслы. Шуны бер ваҡытта ла онотмайыҡ, һуғыш ветерандарын ихтирам итәйек.*

**V. Өй эше.** *Сюжет элементтарын билдәләргә. Эпиграфҡа таянып инша яҙырға.*

**Кәримова Әлфиә Рамил ҡыҙының дәресенә баһалама:**

*Дәрес поэманың авторы тураһында әңгәмә менән башланып китте. "Ҡара һыуҙар" поэмаһына анализ яһала, уңышлы ғына. Образдар һәм өҫтәлмә образдар тураһында уҡыусылар һөйләп бирәләр. Йәнләндереү тураһында бик матур әйттеләр.Төркөмдәрҙә эш алып барыла. Интерактив мәғлүмәттәр бик урынлы ҡуйылған һәм уҡыусылар бик уңышлы сығыш яһанылар. Һөйләү ҡеүәте минеңсә бик яҡшы, фекер йөрөтөү һәм уйлау һәләттәре яҡшы. Шулай итеп, поэманың төп идеяһына уңышлы ғына барып етеп дөйөмләштереп ҡуйҙылар. Афарин!*

*Баҡаева Мәүсилә Зиннәт ҡыҙы, 86 - сы гимназия*

*Дәрес бик эҙмә - эҙлекле барҙы. Уҡытыусы дәресте бик йәнле алып барҙы, структураһы бик дөрөҫ, фәһемле фекрҙәр яңғыраны. Поэманың структураһы төрлө тикшерелде. Эпиграф менән тамамлау, мәңгелек ут, тынлыҡ минуты бик отошло булды.*

*Яңы технологиялар. Проблемалы һорау. Парлап, төркөмләп, индивидуаль эш төрҙәре. Ижади фекерләүҙе үҫтереүҙә ҙур роль бирелде. Предмет – ара бәйләнеш. Юл саты хаҡында фекрҙәр. Ғөмүмән, дәрес бик*